# “Һомай” ҡанат ҡаҡҡанда

**Яҙҙың ҡайнар һулышынан бөтә тәбиғәт уянғанда Әбйәлил үҙәк район китапханаһы янында уңышлы эшләп килгән “Һомай” ҡатын-ҡыҙҙар ойошмаһы “Яҙ миҙгеле гүзәл заттан башлана” исемле ял кисәһенә йыйылды.**



Уйын-көлкө менән һуғарылған сарала “Оҫтабикә” һәм “Хужабикә” командалары “Уңғанбикә”, “Реклама”, “Прическа” һәм башҡа бәйгеләрҙә үҙҙәрен һынап, гүзәл затҡа бәйле викторина һорауҙарына яуап бирҙе. Ә “Шат рәссам” ярышында һәр командан берешәр һылыу сығып, күҙҙәре бәйле килеш “Бәхетле ҡатын-ҡыҙ” һүрәтен матур итеп ҡағыҙҙа сағылдырҙы. Йәш хужабикәләргә тик “К” хәрефенә генә башланған ризыҡ исемдәрен әйтергә ҡушылғас, “Буш һыуыткыс” ҡыҫҡа ваҡытта тәмлекәстәр менән тулды ла ҡуйҙы.

“Оҫтабикә” һәм “Хужабикә”ләрҙе баһалаусы жюри рәйесе, Асҡар биләмәһе ҡатын-ҡыҙҙар ойошмаһы етәксеһе Гөлсөм Хәкимова, Халыҡ-ара ҡатын-ҡыҙҙар көнө һәм ойошмаға бер йәш тулыу айҡанлы ҡотлап, бүләктәр тапшырҙы. Теүәл бер йыл элек клуб етәксеһе Мөнирә Уйылданова үҙе кеүек ижади күңелле, матурлыҡҡа ынтылған ҡатын-ҡыҙҙарҙы берләштереп, уларҙың һәләтен артабан үҫтереү маҡсатында ойошмаға нигеҙ һалғайны. Исемен дә һайлай белгән – “Һомай” – донъяны хозур, ырыҫлы, кешеләрҙе бәхетле итеүсе ҡош-ҡатын, балаларҙы ҡурсалаусы һәм яҡлаусы изге рух! Бындағы гүзәл заттың һәр береһе оҫта ҡуллы, маһир һәм уңған. Улар бер-береһен яңы һөнәрҙәргә өйрәтеп кенә ҡалмай, ә йәмғәт эштәрендә лә әүҙем ҡатнаша. Сөнки клуб ағзалары үҙ ҡаҙанында ғына ҡайнамай: ҡатын-ҡыҙҙар халыҡ-ара “Таланттар йәйғоро” фестивалендә, Бөйөк Еңеүгә бағышланған “Ҡыҙыл ҡәнәфер” Бөтә Рәсәй акцияһында, “БиблиоАсҡар” район акцияһында һәм башҡа сараларҙа ҡатнашырға, төрлө номинацияла еңеү яуларға ла өлгөргән.

“Һомай”ҙарҙың ял кисәһе иҫтәлеккә фотоға төшөү, тәмле сәй табынында аралашыу, үҙ-ара рецептар бүлешеү менән тамамланды.

Л. ҺИҘИӘТОВА.